## Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр һәм әйтемдәр

Ерҙең даны ирҙән.
Ерҙән айырылған елгә оса.
Ере байҙың иле бай.
Иле барҙың көнө бар.
Иле барҙың теле бар.
Иле берҙәмдең көнө берҙәм.
Иле ныҡтың биле ныҡ.
Илен һөйгән ир булыр.
Ипле кеше иленән китмәҫ.
Ир-егет — ил көҙгөһө.
Ир-егеттең аҫылы ил эшендә танылыр.
Ир ҡәҙере ил менән.
Тыуған ерҙең туҙаны ла ҡәҙерле.
Үҙ илеңдә ҡарлуғас булһаң да, кеше илендә ҡарға булырһың.
Халыҡҡа хыянат — Ватанға хыянат.
Һәр кемгә лә үҙ иле ғәзиз.
Аҫыл кеше «алтын» типү, «халҡым» тип үлер.

## Батырлыҡ һәм илде һаҡлау тураһында мәҡәлдәр һәм әйтемдәр

Дошмандан илең һаҡла, ярамһаҡтан сереңһаҡла.
Ил һаҡлаған — ирәйеп йәшәгән.
Ил һаҡлау — ҙурлыҡ, ил баҫыу — хурлыҡ.
Ир маҡтана — ҡорал еңә.
Тыныслыҡтың төбө — уңышлыҡ.
Утты ваҡытында һүндер.
Һөңгөлө яуға тимер ҡалҡаның әҙер булһын.
Батыр даны — көрәштә.
Батыр тыуһа — ил бәхете, ямғыр яуһа — ер бәхете. Батыр үҙ халҡын яҡлай.
Батыр үлемдән ҡурҡмаҫ.
Батыр яуҙа һыналыр.
Батырға үлем юҡ.
Бер егеттең ҡыйыулығы мең егеткә дан килтерер. Егетлек бүрек кейеүҙә түгел, батырлыҡта.
Ир батыры эштә беленер.
Исемеңде ташҡа яҙма, ил йөрәгенә яҙ.
Матурлыҡтан элек батырлыҡ кәрәк.

**Белем тураһында мәкәлдәр һәм әйтемдәр**
Белем алыу — энә менән ҡойо ҡаҙыу.
Белгәнгә яҡты, белмәгәнгә ҡараңғы.
Белеме барҙың ҡәҙере бар.
Белмәгәнгә ботаҡ та бармаҡ.
Буш башаҡтың башы эйелмәй.
Уҡый белмәһәң дә хурлыҡ, уҡып белмәһәң дә хурлыҡ. Үҙе белгән хур булмаҫ.
Ғәмәлһеҙ ғилемдә файҙа юҡ.
Кеше белем менән, ер яуын менән йәшәрер.
Наҙан дәрәжәгә, ғалим камиллеккә ынтыла.
Үҙен ғалим тигән наҙан булыр.
Яҡшы ергә төшкән орлоҡ юғалмай.
Йәшлегеңдә ни сәсһәң, ҡартлығыңда шуны урырһың. Таң йоҡоһон йоҡлаған — бәхетен йоҡлаған.
Бәхет алтын байлығында түгел, аҡыл байлығында.

**Хеҙмәт һәм хөрмәт тураһында мәкәлдәр һәм әйтемдәр**
Ағас емеше менән, кеше эше менән.
Аҙ һөйлә, күп эшлә.
Белгән белгәнен эшләр, белмәгән беләген тешләр.
Бер эшлә, берәгәйле эшлә.
Бер юлы ике кәмәнең ҡойроғон тотоп булмай.
Бөгөнгө эшеңде иртәгәгә ҡалдырма.
Бәхет ерҙән сыҡмаҫ, тирҙән сығыр.
Бәхетһеҙлектең башы — ялҡаулыҡ.
Буй эшләмәй, ҡул эшләй.
Булыр кеше эшенән билгеле.
Уңғандың көрәге лә утын киҫер.
Булдыҡһыҙҙың ҡоралы насар.
Бүренең көсө тешендә, кешенең көсө эшендә.
Дандың төбө — хөрмәт, хөрмәт төбө — хеҙмәт.
Егет кешегә етмеш торлө һөнәр ҙә аҙ.
Егәрленең ҡулы ете.
Илһамлы хеҙмәт — илгә ҡеүәт.
Кешенең кейеменә ҡарап баһалама, эшенә ҡарап баһала. Кеше нәҫеле менән оло булмаҫ, һөнәре менән оло булыр. Күҙ — ҡурҡаҡ, ҡул — батыр.
Ҡулың оҫта булһын, һүҙең ҡыҫҡа булһын.
Күкрәк киреп эшләһәң, килер ерең киң булыр.
Ҡалған эшкә ҡар яуа.

Ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайната бел.
Ҡарағайға ҡарап тал үҫер, хеҙмәтеңә ҡарап дан үҫер. Кешенең матурлығы эшенә ҡарап
Ҡуллана белмәһәң ҡоралға үпкәләмә.
Ҡулы белгән бал ашар.
Ҡыйын эшкә ҡыйыу ҡул.
Өйрәнмәйенсә хеҙмәт юҡ, хеҙмәт итмәй хормәт юҡ. Тырышҡан табыр — ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр.
Тырышлыҡ — ҙурлыҡ, ялҡаулыҡ — хурлыҡ.
Тырыштан тир китмәҫ, ялҡауҙан сир китмәҫ.
Тәүәккәл таш ярыр, булдыҡһыҙ баш ярыр.
Уңған кеше баҫҡан ерендә ут сығара.
Хеҙмәтең ҡаты булһа, тотҡаның татлы булыр, һәнәре бар күккә осор,
Һөнәре юҡ ерҙә лә йөрөй алмаҫ.
Һөнәрһеҙ ир — аяҡлы сир.
Эш кешене кеше итер.
Эштең иң яҡшыһы — үҙең булдыра алған.
Сәмле эш — йәмле эш.
Теләк булһа, беләк ҡарышмай.
Эшсән бәхетте эштән эҙләр, ялҡау бәхетте ситтән эҙләр

**Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт тураһында мәҡәлдәр һәм әйтемдәр**
Дуҫ булһаң, дуҫ ҡәҙерен онотма.
Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер.
Дуҫ көлгәндә беленмәй, бөлгәндә беленә.
Дуҫтан дошманды айыра бел.
Дуҫтан ҡалышыу — дуҫһыҙ ҡалыу.
Дуҫы күпте яу алмай.
Дуҫың булһа, үҙеңдән артыҡ булһын.
Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын.
Иплегә иптәш күп.
Ир-егетте дуҫына ҡарап беләләр.
Ише күптең көсө күп.
Күңелгә ятмағанды дуҫ итмә.
Наҙан дуҫтан зирәк дошман артыҡ.
Яҡшы кешенең дуҫы күп.
Яҡшы юлдашынан беленә.
Айырылғандың ҡанаты ҡайырылған.
Күмәк ағас дауылдан ҡурҡмаҫ.
Яңғыҙ ҡайынға ҡош ҡунмаҫ.
Еләк еләккә ҡарап бешә.
Йән һөйгәнең йәндән артыҡ.
Кем менән даның сыҡһа, шуның менән йәйең сыҡһын.

Күңелең төшмәгәнгә күҙең төшмәһен.
Мөхәббәт таш ярҙырта.
Мөхәббәткә үлем юҡ.
Мөхәббәтте юғалтыу еңел, ҡалдырыу ауыр.
Сәскә яҙ менән, мөхәббәт наҙ менән.
Һөймәгәнгә һөйкәлмә.
Яратҡан күңелдә ялған булмай.
Ҡыҙ ҡылығы менән, егет эше менән һөйҙөрөр.

**Әҙәп һәм ғәҙәт тураһында мәҡәлдәр һәм әйтемдәр**
Башта үҙеңде, унан кешене тикшер.
Кеше кешегә таянып кеше була.
Кешенең яманатын һатҡансы, үҙеңдең яҡшы исемеңде тап.
Ҡәҙер белмәгәндең ҡәҙере юҡ.
Үҙенә-үҙе эйә булмаған бөтәһенә ло эйә булырга тырышыр. Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама.
Ололаһаң олоно, ололарҙар үҙеңде.
Үҙең яҡшы булһаң, кеше лә яҡшы.
Үҙ намыҫын һаҡламаған — кешенекен һаҡламаҫ.
Хаҡлыҡ төбө — шатлыҡ.
Яҡшылыҡҡа өйрән, яманлыҡтан ерән.
Яҡшылыҡты онотма, яманлыҡты күңелеңдә тотма.
Яҡшынан эш ҡала, ямандан үс ҡала.
Бер яҡшы эш мең яҡшы һүҙҙән артыҡ.
Йөрәктән сыҡҡан һүҙ йөрәккә инә.
Йылы көн ҡарҙы иретер, йылы һүҙ йәнде иретер.
Яҡынға ялған әйтмә, ситкә яман әйтмә.
Аҡыл — теҙген, ҡылыҡ — ат, теҙгенеңде белеп тарт.
Аҡыл төбө — тәжрибә.
Аҡылдың ҡәҙере әҙәп менән.
Аҡылдың юлдашы — бәхет.
Яҡшыға эйәргән — уңыр, яманға эйәргән — туңыр.
Атаң менән маҡтанма, атың менән маҡтан.
Аяғың бысраҡ булһа, баҫҡан һайын тап ҡала.
Башаҡ тулған һайын башын түбән эйер.
Дәртһеҙҙең моңо юҡ.
Еseме барҙың исеме бар.
Изгелек — туралыҡта, күркәмлек — холоҡта.
Инсафлының теле саф.
Итегең тайыш булһа ла, йөрәгең тайыш булмаһын.
Ишек асыҡ булһа ла, рөхсәтһеҙ инмә.
Кеше үҙ ҡәҙерен үҙе арттырыр.
Кеше холҡон күҙәт, үҙеңдекен төҙәт.

Кешегә шәфҡәт ит, уҙаманға хөрмәт ит.
Кешенең хөрмәте үҙ ҡулында.
Күңеле пактың йөҙө аҡ.
Ҡаҙан ҡараһы китер, күңел ҡараһы китмәҫ.
Мин-минлеккә таянған — бейек тауҙан йығылған.
Намыҫ аҡсанан ҡиммәт.
Намыҫлы булһаң, намыҫһыҙ менән буталма.
Намыҫты һатып та, алып та булмай.
Намыҫың бысранһа, һабын менән йыуа алмаҫһың.
Намыҫыңды йәштән һаҡла.
Туғыҙыңда ни булһа, туҡһанында шул булыр.
Әҙәмде әҙәм иткән — әҙәп.
Әҙәпкә ғәҙәтләнһәң әҙәм булырһың, яманға ғәҙәтләнһәң әрәм булырһың.
Һандуғас йырын йырлайым тип, үҙ йырыңды онотма.
Асыу йыйма, аҡыл йый.